# 5-9 синыфтар өсөн
# Башҡорт теленән эш планы

**Уҡыу предметын үҙләштереүҙә планлаштырылған һөҙөмтәләр**

*Уҡыусыларҙың "Туған тел (башҡорт)"фәнен өйрәнеүҙең шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:*

Уҡыусы өйрәнәсәк:

- Рәсәйҙең күп милләтле халҡының үткәненә һәм бөгөнгөһөнә хөрмәт менән ҡарарға; үҙенең этник сығышын, үҙ халҡының, тыуған еренең тарихын, телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, кешелектең һәм Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ нигеҙҙәрен белергә; күп милләтле Рәсәй йәмғиәтенең гуманистик, демократик һәм традицион ҡиммәттәрен үҙләштерергә;
- уҡыуға, хеҙмәткә ҡарата яуаплы мөнәсәбәт формалаштырырға;

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:

- хәҙерге донъяның социаль, мәҙәни, тел, рух күп төрлөлөгөн иҫәпкә алып, фәндең һәм ижтимағи тәжрибәнең хәҙерге заман үҫеш дәрәжәһенә тап килгән донъяға тулайым ҡараш формалаштырырға;
- башҡа кешегә, уның фекеренә, донъяға ҡарашына, мәҙәниәтенә, теленә, диненә, гражданлыҡ позицияһына, донъя һәм Рәсәй халыҡтарының тарихына, мәҙәниәтенә, диненә, ғөрөф-ғәҙәттәренә, телдәренә, ҡиммәттәренә аңлы, ихтирамлы һәм игелекле мөнәсәбәт формалаштырырға;
- фәнде үҙләштергәндә ижтимағи тормоштоң формаларын һәм ролдәрен, тәртиплелек ҡағиҙәләрен, йәшәү нормаларын үҙләштерергә;
- шәхси һайлап алыу нигеҙендә әхлаҡ проблемаларын хәл итеүҙә компетентлыҡты һәм әхлаҡи аңлылыҡты үҫтерергә, әхлаҡлылыҡ тойғоһо һәм әхлаҡи яктан үҙ-үҙеңде тәртипле тотоу нормаларын формалаштырырға;
- фәндәрҙе үҙләштереү барышында, фәнни-эҙләнеү, ижади һәм башҡа эшмәкәрлек ваҡытында, шулай уҡ аралашыу процесында (уҡыусы-уҡыусы, уҡыусы-уҡытыусы һ.б) коммуникатив компетентлыҡты үҫтерергә;
- йәмғиәт һәм кеше тормошонда ғаиләнең әһәмиәтен аңларға, ғаилә ҡиммәттәрен ҡабул итергә, ғаилә ағзаларына ҡарата хөрмәтле һәм ҡайғыртыусан мөнәсәбәттә булырға;
- донъя һәм Рәсәй халыҡтарының әҙәби мираҫын үҙләштереү процесында эстетик зауыҡты үҫтерергә.

*Метапредмет һөҙөмтәләре:*

Уҡыусы телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен өйрәнәсәк:

- белем алыу маҡсатын һәм бурыстарын үҙаллы билдәләргә, танып белеү мотивтарын һәм ҡыҙыҡһыныусанлыҡты үҫтерергә;
- максаттарға ирешеү юлдарын, уҡыу һәм танып белеү бурыстарын хәл итеүҙең эффектив ысулдарын аңлы рәүештә һайларға;
- планлаштырылған һөҙөмтәләр менән үҙ хеҙмәте тиңләштерә белергә, һөҙөмтәләргә ирешеү процесында эшмәкәрлекте контролдә тоторға, тәҡдим ителгән шарттарҙа һәм ҡуйылған талаптарҙа эшмәкәрлегенең ысулын билдәләргә, үҙгәреп торған ситуацияларҙа эшмәкәрлегенә коррекция индерергә;
- баһалау, үҙбаһалау нигеҙҙәренә эйә булырға;

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:

- төшөнсәләрҙе билдәләргә, дөйөмләштерә, аналогиялар таба, төркөмдәргә бүлә, сәбәп-нәтижә бәйләнешен күрһәтә, логик фекерҙәр төҙөй, һығымта яһай (индуктив, дедуктив, аналогия буйынса) алырға;
- модель һәм схемалар, билдә һәм символдарҙы төҙөргә, үҙгәртә һәм ҡуллана белергә;
- аңлап-төшөнөп уҡыу алымына эйә булырға;
- үҙ тиңдәштәренең һәм уҡытыусылар менән уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора, төркөмдә һәм үҙаллы эшәй, үз фекереңде формалаштыра, аргументлаштыра һәм уны яҡлай белергә.

*Предмет һөҙөмтәләре*

Уҡыусы өйрәнәсәк:

- формаль һәм формаль булмаған мәҙәниәт ара һәм шәхес ара аралашыуҙарҙа кешеләр араһындағы аралашыуҙарҙың эффектлығын тәьмин итеүсе телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен үҙләштерергә (тыңларға, уҡырға, һөйләргә һәм яҙырға);
- белем биреү һәм үҙаллы белем алыу процесында шәхестең ижади һәм интелектуаль һәләттәрен үҫтереүҙә телдең мөһим роль башҡарыуын аңларға;
- туған телдең коммуникатив-эстетик мөмкинлектәрен ҡулланырға;
- туған тел тураһындағы фәнни белемде системалаштырырға һәм киңәйтергә, уның берәмектәре һәм баҫҡыстары араһындағы бәйләнештәр барлығына төшөнөргә, туған телдең төп берәмектәрен һәм категорияларын, лингвистиканың төп төшөнсәләрен үҙләштерергә;

<u>Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:</u>
- һүҙгә төрлө төрҙәге анализ (фонетик, морфемик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), һүҙбәйләнешкә һәм һөйләмгә синтаксик анализ һәм шулай уҡ теҡсҡа күп аспектлы анализ яһау күнекмәләрен формалаштырырға;
- актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытырға, аралашыу стиленә һәм ситуацияға ярашлы туған телдә хистәрҙе һәм уйҙарҙы иркен белдереү өсөн һөйләмдә ҡулланылыусы грамматик сараларҙың күләмен киңәйтергә;
- туған тел лексикаһының һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, төп нормаларын (орфоэпик, лексик, грамматик, орфографик, пунктуацион), һөйләү этикеты нормаларын үҙләштерергә; уларҙы телдән һәм яҙма фекерҙәрҙе барлыҡҡа килтергәндә һөйләү практикаһында ҡулланыу тәжрибәһен булдырырға; телмәрҙе үҙаллы камиллаштырырға ынтылырға;
- дөйөм кешелек ҡиммәте булараҡ тел мәҙәниәте өсөн яуаплылыҡ хисе формалаштырырға.

<u>Уҡыу предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусылар белергә тейеш:</u>
- йәмғиәт тормошонда телдең ролен, башҡорт (туған) теленең әһәмиәтен белергә;
- синтаксис, стилистика; тыныш билдәләре, текст, һөйләм төшөнсәләре;
- фонетика, телмәр өндәре, ижек, һүҙ баҫымы, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр; өндәрҙең бер-береһенә оҡшашыуы (сингармонизм) төшөнсәләре;
- орфоэпия (дөрөҫ әйтелеш), төп орфоэпик норма төшөнсәләре;
- графика; алфавит; хәрефтәрҙең өндәрҙе сағылдырыу төшөнсәләре;
- орфография (дөрөҫ яҙылыш), һуҙынҡыларҙың һәм тартынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы, һуҙынҡыларҙың һәм тартынҡыларҙың һүҙҙең тамырында, ялғауҙа, һүҙ араһында яҙылышы һәм әйтелеше, һүҙҙе юлдан юлға күсеререргә;
- лексика; һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе;

<u>Түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейеш:</u>
- фонетика, өн-хәреф, һүҙьяһалыш, һүҙ төҙөлөшө буйынса анализ яһай белергә;
- өйрәнелгән орфография ҡағиҙәләрен тәртипкә килтерергә
- өндәш һүҙе һәм тиң киҫәктәре булған ябай һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белергә.

Үҙләштергән белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡулланырға:
- фонетика, өн-хәреф, һүҙьяһалыш, һүҙ төҙөлөшө буйынса анализ яһай белергә;
- һүҙбәйләнеш, ябай ике составлы һөйләмдәр, теркәүесһеҙ һәм теркәүесле ҡушма һөйләмдәр төҙөй белергә;
- һуҙынҡылар менән тартынҡыларҙың төп һыҙаттарын дөйөм билдәләре буйынса төркөмләй, һүҙҙәрҙең тамырында, ялғауҙарында һуҙынҡылар менән тартынҡыларҙы дөрөҫ яҙа, өйрәнелгән орфография ҡағиҙәләрен тәртипкә килтерә белергә;
- төрлө мәғлүмәт саралары менән эшләргә (һүҙлектәр, белешмәләр);
- яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙың мәғәнәләрен айыра белергә;
- өндәш һүҙе һәм тиң киҫәктәре булған ябай һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белергә.

Ижади һәләттәрҙе үҫтереү:
- билдәле бер тема буйынса өҫтәмә материал табырға һәм сығыш яһарға;
- иншалар, яттан шиғыр һөйләүселәр конкурстарында ҡатнашырға

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**5 класс**

Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре. Башҡорт һүҙҙәрендә һүҙ башындағы в хәрефе
Ҡуш тартынҡыларҙың яҙылышы.
Синоним тураһында төшөнсә. Һуҙынҡыларҙың әйтелеше
Антоним тураһында төшөнсә. Ғ һәм һ тартынҡыларының ҡулланышы. ң һәм ç хәрефтәренең ҡулланышы. Омоним тураһында төшөнсә
Ижек. Баçым. Баçымлы һәм баçымһыҙ өндәрҙең әйтелеше. Башҡорт телендә баçым
Һүҙ составы. Тамырҙаш һүҙҙәр. Һүҙ яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙар. Яһалма һәм ҡушма һүҙҙәр. Омонимдар, синонимдар. Үҙләштерелгән һүҙҙәр
Ҡушма һүҙҙәрҙең яһалышы. Фразеологик берәмектәр. Һүҙ аҙағында йә һүҙ башында к, ҡ, п өндәренең әйтелеше. Башҡорт телендә в өнө.
Һөйләмдең эйәрсән киçәктәре. Аныҡлаусы. Тултырыусы. Хәл. Һүҙ төркөмдәре
Исем. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр
Үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм нығытыу. Һорауҙарға яуаптар.
Контроль күсереп яҙыу.
Контроль диктант

**6 класс**

Башҡорт алфавиты. Ҡабатлау. Баçым.
Исем. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең һан һәм зат менән үҙгәреүе
Тамыр, яһалма, ҡушма исемдәр. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе. Исемдәрҙең килеш һәм күплек ялғауҙары. Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреү. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Күплек ялғауының мәғәнәһе
Сифат. Сифат дәрәжәләре. Сифат мәғәнәһен алған исемдәр. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифаттарҙың яһалышы. К, ҡ, г, ғ өндәренең сиратлашыуы. Исем алдында килгән сифаттарҙың үҙгәреүе
Алмаш. Зат алмаштары. Алмаш төркөмсәләре
Биография һәм автобиография тураһында төшөнсә
Һан. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың үҙгәреше. Һандарҙың яҙылышы. Исем алдынан килгән һандарҙың үҙгәреүе
Үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм нығытыу. Һорауҙарға яуаптар.
Контроль күсереп яҙыу.
Контроль диктант

**7 класс**

Фонетика, һүҙъяһалыш, морфология буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау
Ҡылым. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. Ҡылым һөйкәлеше. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының хәҙерге заманы. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының киләсәк заманы. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары. Теләк һөйкәлеше ҡылымдары. Шарт һөйкәлеше ҡылымдары.
Ҡылым төркөмсәләре. Исем ҡылым. Исем ҡылымдарҙың яһалышы. Сифат ҡылым
Хәҙерге заман сифат ҡылым. Киләсәк заман сифат ҡылым. Уртаҡ ҡылым. Хәл ҡылым
Хәл ҡылымдың төрҙәре
Рәүеш. Рәүештәрҙең белдергән мәғәнәһе. Рәүеш төркөмсәләре. Рәүеш дәрәжәләре. Рәүештәрҙең яһалышы
Теркәүестәр. Теркәүестәрҙең дөрөç яҙылышы
Бәйләүестәр. Бәйләүестәрҙең бүленеше
Киçәксәләр. Киçәксәләрҙең бүленеше. Киçәксәләрҙең дөрөç яҙылышы
Мөнәсәбәт һүҙҙәр. Ымлыҡтар. Ымлыҡтарҙың дөрөç яҙылышы
Бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау
Контроль диктант

**8 класс**

Ябай һөйләм синтаксисы. Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Һүҙбәйләнештәрҙең яһалышы
Эйәртеүле бәйләнештәрҙең төрҙәре. Ярашыу. Башҡарылыу. Һөйкәлеү.“Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм” темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау
Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәр.
Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Аныҡлаусы. Өҫтәлмәлек. Тултырыусы. Тура һәм ситләтелгән тултырыусылар. Хәлдәр. Уларҙың төрҙәре. Рәүеш хәле. Урын хәле. Ваҡыт  хәле. Маҡсат хәле. Сәбәп хәле. Шарт хәле. Кире хәл. “Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре” темалары буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Ябай һөйләмгә синтаксик анализ яһау. Тиң киҫәкле һөйләмдәр..Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр.
Ике һәм бер составлы һөйләмдәр. Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре. Билдәле эйәле һөйләм.
Эйәһеҙ һөйләм. Атама һөйләмдәр. Тулы һәм кәм һөйләмдәр.
Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре. Айырымланыу тураһында төшөнсә. Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы. Хәл әйтемдәре һәм уларҙың айырымланыуы. Ябай һөйләм синтаксисы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Өндәш һүҙҙәр. Өндәш һүҙҙәр эргәһендә тыныш билдәләре. Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр.
Тура телмәрле һөйләмдәр. Тура һәм ситләтелгән телмәр. Диалог. Тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. “Тура һәм ситләтелгән телмәр” темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Контроль диктант

**9 класс**

Фонетика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Баҫым
Ижек сиктәре. Һаңғырау өндәрҙең сиратлашыуы
Морфология. Һүҙ төркөмдәренең бүленешен ҡабатлау
Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше
Башҡорт телендә күплек ялғауының мәғәнәһе. Һан төркөмсәләре. (Ҡабатлау)
Сифат. Сифат дәрәжәләре
Ҡылым. (Ҡабатлау). Ҡылымдарға морфологик анализ яһау
Синтаксис. (Ҡабатлау)
Һүҙ һәм һөйләм. Һөйләм киҫәктәре. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. Бер составлы һөйләмдәр. Ҡушма һөйләм синтаксисы. Теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Бер һәм ике составлы һөйләмдәр. “Теҙмә ҡушма һөйләм” темаһы буйынса ҡабатлау
Эйәртеүле ҡушма һөйләм. Эйәрсән һөйләм төрҙәре
Һүҙъяһалыш (Ҡабатлау)
Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар. Башҡорт телендә юҡлыҡты белдереү
Диктант

**Тематик план**

**5 класс**

| № | Тема | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре | 3 |
| 2 | Синоним. Антоним. Омоним | 7 |
| 3 | Ижек. Баҫым | 5 |
| 4 | Һүҙ составы | 5 |
| 5 | Ҡушма һүҙҙәр | 5 |
| 6 | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре | 4 |
| 7 | Һүҙ төркөмдәре | 6 |
| | Барлығы | 35 |

**6 класс**

| № | Тема | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Башҡорт алфавиты | 2 |
| 2 | Исем | 12 |
| 3 | Сифат | 9 |
| 4 | Алмаш | 4 |
| 5 | Һан | 8 |
| | Барлығы | 35 |

**7 класс**

| № | Тема | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Фонетика, һүҙъяһалыш, морфология буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 2 |
| 2 | Ҡылым. Ҡылым һөйкәлеше | 8 |
| 3 | Ҡылым төркөмсәләре. | 9 |
| 4 | Рәүеш. | 5 |
| 5 | Теркәүестәр. | 6 |
| 6 | Мөнәсәбәт һүҙҙәр | 5 |
| | Барлығы | 35 |

**8 класс**

| № | Тема | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Ябай һөйләм синтаксисы. Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм | 5 |
| 2 | Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре | 9 |
| 3 | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре | 2 |
| 4 | Тиң киҫәкле һөйләмдәр | 2 |
| 5 | Ике һәм бер составлы һөйләмдәр | 5 |
| 6 | Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре | 9 |
| 7 | Тура һәм ситләтелгән телмәр. | 3 |
| | Барлығы | 35 |

**9 класс**

| № | Тема | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Фонетика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 4 |
| 2 | Морфология | 6 |
| 3 | Ҡылым | 7 |
| 4 | Ҡушма һөйләм | 11 |
| 5 | Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар | 2 |

| | | |
|---|---|---|
| 6 | Башҡорт телендә юҡлыҡты белдереү | 4 |
| | Барлығы | 34 |